**Маҡтау бары Һиңә Раббым Ғайса**

Маҡтау бары Һиңә Раббым Ғайса,
Һинең барлығыңа мин иман килтерҙем.
Раббы булдың һин барлыҡ кешеләргә,
Үҙеңә алып бар гонаһтарҙы, беҙҙе кисерҙең.

Теҙләнеп Һинең алда, доға ҡылам,
Ҡулдарымды һоноп, Һинән һорайым.
Көн һайын, Һинең алда ҡылған гонаһтарҙы,
Йыуып төшөрһөн ине тип,Хоҙайым!

Иманлылар араһында йәшәт Һин мине,
Иманһыҙҙар осраған саҡта Үҙең арала,
Тыйылғандан мине тыйылырға өйрәт,
Иман нуры булһын ине беҙҙең арала.

Оятһыҙ менән яман заттан мине һаҡла,
Һинең ризалығың булһын һәр эштә.
Был тормош юлын үтеп сығыр өсөн,
Хоҙайым миңә көн һайын көс өҫтә.

Көс етерлек итеп кенә ауырлыҡтар,
Бирәһең Һин Хоҙайым беҙҙе һынар өсөн,
Насип итһәң ине һуңғы һулышҡаса,
Юғалтмаҫҡа,Һинән алған иманымдың көсөн!